## 5 кластар өсөн олимпиада һорауҙары

1. Ниндәй мәҡәлдең килеп сығышы ошо легендаға бәйле :

*Борон бер батшаны вәзирҙәре ҡунаҡҡа саҡырған. Ил башлығы, кеселеклелек күрһәтеп, саҡырыуҙы ҡабул иткән, әммә бер шарт ҡуйған:*
*-Килермен, әммә табында минән ҙур кеше булмаһын.*
*Вәзирҙәре бер-береһенә ҡарап көлөшә - илдә унан ҙур тағы кем булыуы мөмкин инде! Тейешле ваҡытында табын йыйыла, батшаны иң хөрмәтле урынға ултыртып, бисмилла әйтеп ризыҡҡа үрелеүҙәре була, өйҙә ярһып бер сабый илай башлай. Һис кем тыя ла, әүрәтә лә алмай, ти.*
*- Әйттем бит мин һеҙгә, минән ҙур кеше булмаһын, тип, ә һеҙ шартымды үтәмәгәнһегеҙ, - ти ҙә батша, ҡайта ла китә.*

2. Мәҡәлдәрҙе дауам ит:

*Аҡылың булһа - аҡылға эйәр, …*
*Атаһыҙ бала - туйҙа етем, …*
*Ит ашаһаң - дарыу,*
*Ҡырмыҫҡа ла ҙур түгел, …*
*Һәр сәскәнең үҙ еҫе.*

*3. Матур, һылыу, сибәр, гүзәл, ҡупшы.* Был һүҙҙәр теҙмәһе нисек атала?
*4. Таш-сы, таш-лы, таш- лыҡ.* Был һүҙҙәрҙең ялғауҙары нисек атала?
5. Ҡайһы төркөмдәге һүҙҙәр дөрөҫ яҙылған?
Фестивалға, лагерҙа, власте
Приискыға, артисты, власты
Фестивалгә, лагерҙа, части.
6. Һүҙ төҙөлөшөн өйрәнә торған фән нисек атала?
7. Тамыр, ҡул, яҙ, бал. Былар ниндәй һүҙҙәр?
*8. Рус телендә бирелгән фразеологизмдарҙың башҡорт телендәге парҙарын тап:*
- *Два сапога пара*
- *Душа нараспашку*
- *Глаза на мокром месте*
- *Сыграть в ящик*
- *Кот наплакал*
- *Бить баклуши*
- *Пристал как банный лист*
- *Водить за нос*
- *Выеденного яйца не стоит*
- *Кошки на душе скребут*

*9. Уҡыйым, уҡыйбыҙ* ҡылымдары ниндәй затта килгән?
*10. **Кем?*** һорауына ҡайһы төркөмдәге һүҙҙәр яуап була?
Хайуан атамалары
Ҡош-ҡорт атамалары
Кешене белдергән һүҙҙәр

Йәнһеҙ әйберҙәр

*11.* "***Игенселек***" һүҙенә ниндәй күплек ялғауы ҡушылыр?

*12.* ***"Ат"*** һүҙенә тамырҙаш булған һүҙҙе тап

Атыш
Атай
Атлай
Атлы
Атҡан

13. Йомаҡтарҙы сис:

a) Иртә торҙом,
Ике айырлы юлға төштөм.
b) Ана тора бер үгеҙ,
Бер үҙенә дүрт мөгөҙ.
c) Тышта юҡ, урманда бар,
Өйҙә юҡ, мунсала бар.
d) Бәләкәй генә аҡ тана мөгөҙөм бар тип маҡтана.
e) Дурт апайға бер яулыҡ.
f) Тимер башлы йылан үҙ ҡойроғон тешләгән.
g) Бер үк ерҙә ятабыҙ,
Дуҫ йәшәйбеҙ тыштан беҙ.
Ысынлап та уның менән
Татыу түгел, дошман беҙ.
h) Үҙе уҡый белмәһә лә ғүмер буйы яҙыша.
i) Үҙенән башы ҙур.
j) Өй түбәмдә сатлы ҡамсы.

14. Минең бер дуҫым бурлат дүнән, икенсеһе ҡоба ҡонан. Уларҙы нимә менән һыйлап була?

15. Мәсьәләләрҙең яуабын яҙ.

a) Ғаиләлә ике бала. Разат - Сулпандың ағаһы, ләкин Сулпан Разаттың энеһе түгел. Шундай хәлдең булыуы мөмкинме?
b) Ҡайһыһы еңелерәк: бер килограмм мамыҡмы, әллә бер килограмм тимерме?

c) Ике ҡулда нисә бармаҡ? 10 ҡулда нисә бармаҡ?

d) Ике ат 60 саҡрым юл үткән. Һәр ат нисәшәр саҡрым юл үткән?
e) Киске алты.Алһыу ҡыҙыл нур бөркөлә шәфәҡтән. Уны күреп булырмы һүң илле алты сәғәттән?

16. Ағиҙелдең матурлығы менән һоҡланырға килгән егеттәрҙең исемдәрен әйт.

17. “Йәшәне инде шунда бер ялҡау. Шыр тиле ине, мәрхүмең. Байғош ҡына булһа ла, маҡтаныуҙан башҡаны белмәй торғайны.” Кем тураһында һүҙ бара?

18. Йәтимәк ауылы 35 өй – был ниндәй адрес?

19.. Нөктә урынына төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡуй.

a) 7 ҡат үлсә, 1 ... …
b) … … 70 төрлө һөнәр ҙә аҙ.
c) 5те эшләгәнсе 1ҙе … …
d) 100 … …, 100 … …
e) … 1 еңер, … 1000 …
f) 1 ағас …, 40 …
g) 6 йәшәр юлдан ҡайтһа, 60 йәшәр … …
h) … … 4
i) 2 … 1 булһа, 50 … 100 була.
j) 1… 2 ҡуян.

20. Был шиғыр юлдары ҡайһы әҫәрҙән?Авторы кем?

*Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға*
*Килмәнем бит, донъя, мин һиңә.*

## 6 кластар өсөн олимпиада һорауҙары

1. Тексты тәржемә итегеҙ.

   a. *Города имеют свою биографию. Города, как и люди, имеют свою биографию: место и дату рождения, детство, отрочество, годы возмужания. Бывают, что города стареют и умирают, но чаще бывает наоборот: с каждым годом расцветают, с каждым столетием молодеют, становятся краше, благоустроеннее.*

*Так и Уфа, которая начала свой длинный путь с маленького укрепленного пункта на крутом берегу Агидели. Рядом несла свои чистые воды родниковая речка Сутолока, а чуть дальше на востоке, блестела тихая гладь Караидели – Уфимки. Поселение, расположенное там, где сейчас монумент Дружбы, в первое время носило название “Тура-тау”, а затем “Имән ҡала” - “Дубовый город”, и спустя годы оно получило нынешнее имя – Уфа.*

   b. Өфө тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығыҙ, шуларҙы һанап яҙығыҙ.

2. “Металл” һүҙен килеш менән үҙгәртеп яҙырға.

3. Фразеологизмдарҙың синонимик варианттарын яҙығыҙ:

   a. А) баш ҡатыу

   b. Б) борсаҡ бешмәү

   c. В) тамаҡ ялғау

   d. Г) һөрән һалыу

4. Үҙ аллы мәғәнәгә эйә булған һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен һанап сығығыҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.

5. Русса тексты тәржемә итеп, Һандарҙы дөрөҫ ҡулланып яҙығыҙ.

   a. Первый трамвай в Уфе был пущен в 1937 году.Первый трамвайный путь был длиною около девяти километров.Город обслуживало всего 13 трамвайных вагонов.Первый троллейбус в Уфе появился в 1962 году. Маршрут был один – от монумента Дружбы до сельхозинститута.

6. Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ һәм аҫтына һыҙылған һүҙҙәргә һорау яҙығыҙ.

Ҡалған эшкә ҡар яуыр. Беренсе мартҡа тиклем ҡара ҡарға күренһә, ҡар тиҙ ҡайтыр. Күп өргән эт тешләмәҫ. Ер өҫтөн ап-аҡ ҡар ҡаплаған. Һалҡын ел иҫә.

7. Бирелгән сифаттарҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ.Ҡыҫҡ*а, бейек, йылы,*ҡараңғы.
8. Бирелгән һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар өҫтәп, яңы исемдәр яҙығыҙ.

Юл, өс,уйын, йыр, балыҡ.

9. Башҡорт теленең һуҙынҡы өн-хәрефтәрен парлап яҙығыҙ.
10. Биш яңғыҙлыҡ исем ҡулланып кескәй хикәйә яҙырға.(Күләме 6 һөйләм)
11. Халыҡ ижады сюжетын файҙаланып яҙылған ҡулъяҙма әҫәр:
    a. А) “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”
    b. Б) “Егеткә”
    c. В) “Ҡисса – и – Йософ”
12. “Ауылда ҡыш”картинаһының авторын билдәләгеҙ.
13. Был шиғыр юлдары ҡайһы әҫәрҙән?Авторы кем?
    a. *Егет ҡулы тейһә, ер майы ла*
    b. *Ете ҡаттан ата фонтанын.*
14. Ни өсөн француздар башҡорттарҙы “төньяҡ амурҙары” тип атағандар?
15. Башҡорт халыҡ йырҙарын һанап сығығыҙ.
16. Нимә ул хитап?
17. Ҡасан һәм ни өсөн ҡарағайҙарҙы байрамса биҙәгәндәр?
18. Сәйфи Ҡудаш ҡасан Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен яулаған?
19. Яҙыусы Ғайса Хөсәйенов *Шул телем мине киң донъяға алып сыҡҡан,* ти. Ул нимәне күҙ уңында тотто икән?
20. Салауат Юлаев образы асылған әҫәрҙәрҙе яҙығыҙ.

## 7 кластар өсөн олимпиада һорауҙары

1. Халыҡ ижадының ниндәй төрҙәре бар?
2. Башҡорт халыҡ әкиәттәре нисә төркөмгә бүленә? Миҫалдар килтерегеҙ.
3. Нимә ул легенда?
4. Риүәйәттәргә һәм легендаларға миҫалдар яҙығыҙ.
5. Ниндәй тарихи йырҙар беләһегеҙ?
6. Халыҡ яҙыусыларын һанап китегеҙ.
7. *Ай, тау ғына яҡшы, тау яҡшы,*

*Тау яғалап үткән юл яҡшы.*
*Алтын менән көмөш сыҡҡан ерҙән*
*Тыуған ғына үҫкән ил яҡшы.*
Бирелгән өҙөк ниндәй йырҙан алынған?

8. Нимә ул хикәйә?Нимә ул хикәйә- бикәйә? Хикәйә романдан нимәһе менән айырыла?
9. Мәҡәлдең аҙағын яҙ.

Һөнәр - ... ҡанаты .
Изгелектең иртәһе, ......
… дуҫ … дошмандан ҡурҡынысыраҡ.
… ҡайынға … ҡунмаҫ.
Тик ятҡан … мүкләнә, быуылған … еҫләнә, ташландыҡ … тутыға.

10. «Туғандар һәм таныштар» романының авторы кем?
11. Исемгә хас булмаған грамматик категорияны яҙығыҙ.
12. *Лагерь* һүҙен килеш менән үҙгәртегеҙ.
13. *Күкһел төҫ, һорғолт ботинка* һүҙбәйләнештәрендә сифаттар ниндәй дәрәжәлә?
14. Ер-һыу, һауыт-һаба исемдәре ниндәй юл менән яһалған?
15. Нимә ул антоним? Миҫалдар килтерегеҙ.
16. Нимә ул ҡылым? Ҡылым һөйкәлештәрен һанап үтегеҙ.Һәр береһенә һөйләм төҙөгөҙ.
17. Һөйләмдәге мәғәнәләренә ҡарап, ҡылымдар нисә төргә бүленә?
18. Башҡортостандағы тауҙар исемдәрен ҡулланып, 2 строфалы шиғыр яҙырға.
19. *Өләсәйем кистәрен беҙгә гел дә әкиәт һөйләй ине*. Ҡылымдың һөйкәлешен билдәләгеҙ
20. – Йәмәғәт, - тине ул ҡысҡырмай ғына, - уйлашайыҡ әле. (М.Кәрим).

Билдәләнгән ҡылымдың һөйкәлеше ниндәй?

## 8 кластар өсөн олимпиада һорауҙары

1)Һөйләмдәге тиң киҫәктәр ниндәй һүҙбәйләнеште барлыҡҡа килтерә ?

2) *Шәп саба* һүҙбәйләнешендә эйәреүсе һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнән килә?

3)Һөйләмдә ниндәй һөйләм киҫәге бер һүҙгә лә буйһонмай?

4*) Аҡъял батыр ил гиҙергә сығып киткән* һөйләмендә ҡайһы һүҙ өҫтәлмәлек булып килгән?

5)*Әсғәт ҡалаға уҡырға китте* һөйләмендә ҡайһы һүҙ маҡсат хәле булған?

6) Башҡорт телендә күплек ялғауҙары нисә төрлө килә?

7) Шарт ҡылымдар менән килгән *та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* киҫәксәләре һәм төбәү килештәге исем ҡылымдарҙан килгән *ни эшләһә лә? ни эшләмәһә лә? нимәгә ҡарамаҫтан?* һорауҙарына яуап булған хәлдәрҙе атағыҙ.

8) Хәл әйтемдәре ҡасан айырымланып килә?

9)Хәбәре тик өсөнсө затта килгән ниндәй бер составлы һөйләм бар?

10)Тексты башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

*Журавли улетели.*
*Журавли улетели… Но весной обещали вернуться.*
*Аксакалы знают: печальное курлыканье журавлей нельзя слушать с непокрытой головой. И думать в эти минуты можно только о чем-то хорошем, добром. Арабский ученый Ахмед ибн-Фадлан еще в X веке записал башкирскую легенду о том, как журавли предупредили мирный народ о наступлении вражеского войска. Может, поэтому люди в наших краях с давних пор относятся к этим серым грациозным птицам бережно, с любовью? Оставляют для них зерновые колоски на убранных полях. А во время охоты, завидев в небе стройный журавьиный клин, опускают ружье. Для башкир журавль был и по сей день остается священной птицей.*
*В нашей республике журавли находятся под защитой закона. Серый журавль занесен в Красную Книгу Республики Башкортостан. Но традиционная охота на пролетных птиц сохраняется до сих пор в Афганистане, несмотря на протест международной природоохранной и орнитологической общественности.*

11)Башҡортостандың Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында 1924 йылдың 7 апрелендә тыуған яҙыусы.

12)Түбәндәге өҙөк ниндәй әҫәрҙән:

*Таһирҙың атаһы Таип урта кәүҙәле, кәзә һаҡаллы, ҡиәфәте менән ғәрәптәргә тартым- ҡыр танаулы, ҡуңыр битле, йәштән генә башына сал кергән, йәшкелт күҙле, асыҡ сырайлы ир була.*

13)Ноғман Мусиндың тәүге хикәйәһе нисек атала?

14)Яныбай Хамматовҡа ҡасан С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелә?

15)Мәҡәлдәргә тейешле һүҙҙәр ҡуйығыҙ.

а)Ғүмер ... менән түгел, ... менән билдәләнә.

б)Өҫтән аҫҡа осоу өсөн ... кәрәкмәй.

в)Ныҡ күтәрелгән ... … ҡаплай.

г)Күрше ... ташланған ... үрсеп ҡайта.

ғ)Уңған кеше ... … иренер.

д)Дошман ... башлаһа, ... эҙлә.

16)Халыҡ шағиры исемен беренсе булып кем ала?

17)Үлмәҫбай поэмаһынын нисәнсе бүлегендә төп герой дошман тылына тел алырға бара?

18) Был өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған:

*Ул йылды Ҡарлыман йылғаһы, туғайҙарға йәйелеп, аҡтарылып ташты ла, егергә өйрәтелә торған тай шикелле, әкрен-әкрен генә йыуашланып, элекке тыныс хәленә ҡайтты?*

19)*Муйыны дуға – арҡаһы эйәр.* Был йомаҡ ниндәй төркөмгә ҡарай?

20)Фәнил Күзбәков, Фәүзиә Рәхимғолова,Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Яныбай Хамматов – был шәхестәрҙе нимә бәйләй?

## 9 кластар өсөн олимпиада һорауҙары

1. Йомаҡтар, әйтемдәр, һынамыштар, мәҡәлдәр ниндәй жанрға ҡарай?
2. Тәүге башҡортса әлифба нисәнсе йылда баҫылып сыға?
3. Йыйыу,бүлеү, ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре ярҙамында бәйләнгән теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр ҡулланып, “Күл буйында” темаһына һүрәтләмә яҙығыҙ.
4. Нимә ул *иртәк ?*
5. Һөйләмдәрҙе тәржемә ит һәм уларҙан мөмкин булғанса ҡушма һөйләмдәр төҙө: *Самолет остановился / пассажиры пошли к выходу / зазвонил телефон /*
6. “Кәкре ҡайынға терәтеү” нығынған һүҙбәйләнешенең синонимик варианттарын яҙығыҙ.
7. Нисә йәшендә Яйыҡ ат менә?
8. Зәркүм йотҡан боландың нисә мөгөҙө булған?
9. Ниндәй маҡсат менән Шүлгән Уралдың ынййы башлы таяғын һорап алған?
10. Был ниндәй һөйләм:
    *Бөтә ерҙә ҡоштар һайрай, бал ҡорттары беҙелдәй, турғайҙар тирәләй әйләнеп оса, сәскәләрҙән бал еҫтәре аңҡый – тәбиғәт – йоҡоһонан уянғанға шатланған бала.*
11. *М.Өмөтбаев А.С. Пушкиндың ниндәй әҫәрен төркисәгә тәржемә итә?*
12. *1908-1917 йылдарҙағы “Шура” журналының баш редакторын атағыҙ.*
13. Хикмәт хажи, ишан мөриде Муса, Ғәббәс мулла, Әсмә, Ғәйшә – был геройҙар ниндәй әҫәрҙән?

14. Элекке Златоуст өйәҙе Мырҙалар олоҫонда Мәхмүт ауылында тыуған, Пугачев етәкселегендә Крәҫтиән һуғышының, 1812 йылғы Ватан һуғышы осоро ваҡиғаларының шаһиты булған сәсәнде атағыҙ.

15. Түбәндәге өҙөктөң исемен һәм авторын атағыҙ: *Башҡорттарҙың борнғо йыры өлән тип атала. Өләң – ул хикәйәт, йәғни эпос … аралашҡандан алып өләңдәр дүртәр юллыҡ лирик рифмаларға әүерелә.*

16. *1895* - был ниндәй дата?

17. *Байнаҙар тархандың улы, йөҙҙән артыҡ йыл йәшәгән сәсән кем?*

18. Түбәндәге өҙөктө тәржемә итең: *Древние шежере до нас не дошли. В далеком прошлом они бытовали в основном как фольклорные произведения в устной форме. Самым древним по времени записи является шежере племени Юрматы. Оно было записано в 1564 году муллой Бакыем со слов родоначальника племени Татигас-бия. Шежере племени Мин записано в 1967 году. Башкирские шежере написаны арабскими буквами на письменно- литературном языке тюрки.*

19. Мәҡәлдәргә тейешле һүҙҙәр ҡуйығыҙ:

Асыу … , аҡыл …

Аҙ …, күп …

Үҙеңде …, кешене …

Ҡуллана белмәһәң, … асыуланма.

… ҡарҙы иретер, … йәнде иретер.

20. Түбәндәге һөйләмгә тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ , төрөн билдәләгеҙ: *Юлиә бына шуның өсөн был көндәрҙә бик оҙаҡ уйланды уларҙың кәңәшенә ҡушылып мөгәзәйҙе асырға кәңәш итһәк, күп кеше язаға тартыласаҡ әгәр кәңәш бирмәй кире ҡаҡһаң йөҙләгән кеше астан ҡырыласаҡ.*

## 10 **кластар өсөн олимпиада һорауҙары**

1. Архаизмдарға 5 миҫал килтерегеҙ.

2. *<u>Һауынсы</u>* һүҙен хәбәрлек ялғауы менән үҙгәртегеҙ.

3. Йөкмәтеү йүнәлешенә миҫалдар яҙығыҙ.
4. Эйәлек алмаштарын ҡулланып 3 һөйләм яҙығыҙ.
5. Талғын өндәрҙе һанап сығығыҙ.
6. Һүҙҙәргә баҫым ҡуйығыҙ: *хатта, килдеңме, эшлә, һинеңсә, япраҡ, бәлки.*
7. *"Илатмағыҙ ағастарҙы"* темаһына эссе яҙығыҙ. (Күләме 150 һүҙ)
8. *Балаларымды, эштәреңде* һүҙҙәрендә ниндәй ялғауҙар бар?
9. *Уйнап ебәр, олатай!* Был ниндәй һөйләм?
10. *Ҡараңғы төшкәс, кешеләр эштән ҡайта башланы.* Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә нимә ярҙамында бәйләнгән?
11. Ғәлимов Сәләмдең поэмаларын атағыҙ.
12. *Новиков* Д.Юлтыйҙың ҡайһы әҫәренән алынған?
13. Ә.Вәлиди һуңғы көндәрен ҡайҙа үткәрә һәм уның ҡәбере ҡайҙа?
14. Ғәйнән Хәйриҙең тулы исеме нисек?
15. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәтенең төп темаһы ниндәй?
16. "Ер-әсә" образы З.Биишеваның ҡайһы әҫәрендә һүрәтләнә?
17. Һ. Дәүләтшинаның ҡайҙа йорт-музейы бар?
18. *Аҡсәскә* образы кем әҫәренән алынған?
19. "Ҡаһым түрә" әҫәренең авторы кем?
20. Р.Ниғмәтиҙең ниндәй әҫәрендә ҡобайыр традициялары һаҡланған? Нимә ул ҡобайыр?